

**Динис Бүләков(1944)**
**Динис Мөҙәрис улы Бүләков 1944 йылдың 18 майында Мәләүез районы Арыҫлан ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған.**

**1960 — 1964 йылдарҙа Бәләбәй ауыл хужалығы техникумын тамамлай. Бәләбәй, Бишбүләк, Йәрмәкәй районддары өсөн сығарылған "Еңеү байрағы" гәзите редакцияһында эшләй. 1965 йылда һалдатҡа алына. Армиянан ҡайтаһы йылында Мәскәүҙәге А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға инә. 1968 — 1974 йылдарҙа "Совет Башҡортостаны" гәзите, "Ағиҙел" журналында әҙәби хеҙмәткәр, бүлек мөдире була. 1977 — 1986 йылдарҙа "Пионер" журналының баш мөхәррире.**

**1986 йылдан — телевидение һәм радиотапшырыуҙар буйынса Дәүләт комитеты рәйесе.**

**1988 — 1995 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе. Был йылдарҙа үҙен оҫта ойоштороусы, йәмәғәтсе, күренекле яҙыусы итеп таныта.**

**Д. Бүләков әҙәбиәт менән йәштән үк ҡыҙыҡһына башлай. Урта мәктәптә һәм техникумда уҡығанда, әҫәрҙәрен баҫтыра. "Ҡояш ярсығы" тигән тәүге хикәйәләр йыйынтығы 1971 йылда баҫылып сыға. Унының хикәйәләренең төп геройҙары — беҙҙең замандаштар, йәш энтузиастар. Ул үҙенең геройҙарының эске донъяһын, психологик уй-тойғоларын мауыҡтырғыс тормош ваҡиғаларында һүрәтләй белә. "Ауылымдың аҡ өйҙәре", "Һары һандуғас балаһы", "Аҡбуҙ алышҡа сыға" китаптарына ингән повесть һәм хикәйәләрендә һәләтле прозаиктың әҙәби оҫталығы үҫә һәм камиллаша барыуын асыҡ билдәләп була. Яҙыусы эпик хикәйәләү алымдарын уңышлы үҙләштерә һәм мауыҡтырғыс образдар тыуҙыра. Әҫәрҙән әҫәргә, китаптан китапҡа яҙыусының ижад офоҡтары киңәйә, ҡәләме үткерләшә килде.**

**Динис Бүләков 90-сы йылдарҙа башҡорт романистары сафында ныҡлы урын алды. 1988 йылда донъя күргән "Килмешәк", "Туҙҙырылған тамуҡ" романдары ҡырҡыу замана проблемаларына арналыуы менән әһәмиәтле.**

**Динис Бүләков Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре,**
**Ғ. Сәләм һәм Салауат Юлаев исемендәге премиялар лауреаты.**

**1973 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы ине.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Зәйнәб Биишева**
**(1908-1996)**

**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Зәйнәб Биишева ижады әҙәбиәтебеҙҙең сағыу биттәрен тәшкил итә. Зәйнәб Биишева 1908 йылдың 2 ғинуарында Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен районы Туйымбәт ауылында ерһеҙ крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Ата-әсәһенән бик йәшләй етем ҡала. Ауыл мәктәбен тамамлағандан һуң, 1924 йылда ул Ырымбурҙағы башҡорт педагогия техникумына уҡырға инә һәм уны уңышлы тамамлап сыға. 1929 — 1931 йылдарҙа Баймаҡ районы Темәс ауылында уҡытыусы булып эшләй, ауылда яңы тормош төҙөү эшендә әүҙем ҡатнаша.**
**1931 йылда 3. Биишева Башҡортостан китап нәшриәтенә эшкә ҡалдырыла. Тәүҙә ул башҡорт һәм татар телдәрендә сыға торған “Пионер” исемле дәреслек-журналдың яуаплы мөхәррире, аҙаҡ нәшриәттең дәреслектәр секторында мөхәррир булып эшләй.**
**1938 — 1951 йылдарҙа 3. Биишева төрлө гәзиттәрҙә, радиокомитетта эшләй. 1951 йылдан һуң — профессиональ яҙыусы. Зәйнәб Биишева — төрлө жанрҙарҙа берҙәй оҫта эшләгән әҙип. Унның тиҫтәләгән шиғыр һәм поэмалары, “Дуҫлыҡ”, “Серле ҡурай”, “Гөлбәҙәр” тигән драма әҫәрҙәре, балалар өсөн яҙылған әкиәттәре бар.**
**Зәйнәб Биишева бигерәк тә проза өлкәһендә актив эшләп килә. Унның “Яҡтыға” трилогияһына ингән “Кәмһетелгәндәр”, “Оло Эйек буйында”, “Емеш” исемле романдары уҡыусылар тарафынан йылы ҡаршы алынды һәм уларҙың яратып уҡыған әҫәрҙәренә әүерелде. Үҙенең “Сәйер кеше”, “Уйҙар, уйҙар...”, “Ҡайҙа һин, Гөлниса?” тигән повестарында яҙыусы йәштәр тормошоноң мөһим яҡтарын һүрәтләй. “Мөхәббәт һәм нәфрәт” тигән китабы яҙыусының хикәйәт жанрының оҫтаһы булыуын күрһәтте. 1981 — 1982 йылдарҙа әҫәрҙәренең 4 томлы йыйынтығы баҫылып сыҡты. Күп әҫәрҙәре урыҫ телендә донъя күрҙе. Яҙыусы әҙәби тәнҡит һәм тәржемә өлкәһендә лә һәләтен һынаны. Зәйнәб Биишева йәмәғәт эштәрендә һәм әҙәбиәт өлкәһендә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн миҙалдар һәм өс тапҡыр “Почет Билдәһе” ордены менән бүләкләнде. 1968 йылда Салауат Юлаев исемендәге республика премияһына лайыҡ булды.**
**Әҙибә 1996 йылда Өфө ҡалаһында вафат булды.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Мәжит Ғафури**
**(1880-1934)**

**Башҡорт әҙәбиәтенең классигы Мәжит Ғафури (Ғәбделмәжит Нурғәни улы Ғафуров) 1880 йылдың 2 авгусында Башҡортостандың Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Ғафури районы) Елемҡаран ауылында хәлфә ғаиләһендә тыуған. Ете йәштән үҙҙәренең ауыл мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бер аҙҙан һуң Елемҡарандан алыҫ түгел Үтәш ауылы мәҙрәсәһендә уҡып белем ала. 1898 йылда Троицк ҡалаһына барып, Зәйнулла ишан мәҙрәсәһенә керә. Ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡыта, ҡаҙаҡ халҡының фольклорын өйрәнә, рус әҙәбиәте менән дә ҡыҙыҡһына башлай. 1904 йылда Ҡаҙанға килеп, "Мөхәммәдиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1906 йылдың аҙаҡтарында М. Ғафури Өфөгә ҡайта һәм "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә уҡырға урынлаша. М. Ғафури XX быуаттың баштарында ижад эше менән шөғөлләнә башлай. Был осорҙа ижад ителгән "Себер тимер юлы", "Башҡа мәмләкәттәрҙә мосолмандарҙың хәле", "Ғилем", "Йәш ғүмер" кеүек гуманизм менән һуғарылған, аң-белемгә саҡырған, өгөт-нәсихәтле дидактик шиғырҙары инде халыҡ күңеленә бик яҡын инеләр. 1905 йылғы революция көндәрендә ул "Ваҡыт етте", "Шатлыҡ йыры", "Хөрриәт дәүерендә", "Бай кеше" кеүек ысын көрәш пафосын сағылдырған шиғырҙарын яҙҙы. М. Ғафуриҙың егерменсе йылдар ижадында проза жанры ҙур урын биләй. Ул революцияға тиклем дә "Фәҡирлек менән үткән тереклек", "Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ", "Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын", "Үгәй балалар", "Онотолған енәйәт", "Һалдат ҡатыны Хәмиҙә" кеүек реалистик хикәйәләрен ижад итте. Ә инде һуңғы йылдарҙағы прозаһы тәрән эпик дөйөмләштереүҙәр, тулы ҡанлы художество образдар тыуҙырыу, халыҡ тормошон киңерәк полотноларҙа күрһәтеүе менән характерлылар. Айырыуса "Ҡара йөҙҙәр", "Шағирҙың алтынприискыһында", "Тормош баҫҡыстары" повестары башҡорт прозаһын үҫтереүҙә әһәмиәтле роль уйнанылар. М. Ғафури башҡорт әҙәбиәтенең бөтә жанрҙарында ла эшләне.**
**1934 йылдың 28 октябрендә М. Ғафури күптән килгән үпкә ауырыуынан Өфөлә вафат була.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Дауыт Юлтый**
**(1893-1938)**

**Дауыт Юлтый (Дауыт Исхаҡ улы Юлтыев) 1893 йылдың 18 апрелендә элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙенә ҡараған (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Иванов районы) Юлтый ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Мәктәп йәшенә еткәс, Дауыт үҙ ауылдарындағы мәҙрәсәгә уҡырға йөрөй башлай. Артабан ул үҙҙәренә яҡын булған Сорокин мәҙрәсәһенә бара. Бында Дауыт бер нисә йыл уҡый. Уҡыу өсөн бер аҙ аҡса йыйыу ниәте менән Ҡаҙағстанға китеп, бер-ике йәй ҡаҙаҡ балаларын, ә аҙаҡтан үҙ ауылына ҡайтып, балалар уҡытып йөрөй. 1914 йылда, беренсе донъя һуғышы сыҡҡас та, Дауыт ике ағаһы менән бер мәлдә һалдатҡа алына. Дауыт Юлтый 1919 йылда Коммунистар партияһы сафына инә, граждандар һуғышы фронттарында була. Ошо мәлде беренсе революцион армияның штабында сыҡҡан “Ҡыҙыл йондоҙ” гәзитендә эшләй. 1920 йылдың аҙағында Д. Юлтый Башҡортостандың элекке баш ҡалаһы Стәрлетамаҡҡа саҡыртып алына, һәм уға бик күп яуаплы эштәр йөкләтелә.. Артабан республика хәрби комиссариаты политидаралығының мәктәптәр бүлегендә инспектор ҙа, Башҡортостан дәүләт нәшриәтенең мөдире лә, Башҡорт дәүләт драма театрының әҙәби консультанты ла булып эшләй. 1921 йылдан Юлтый “Башҡортостан” гәзитенә мөхәррир итеп тәғәйенләнә, “Яңы юл”, “Белем” кеүек журналдар ҙа уның редакторлығында сыға.**

**1925 — 1926 йылдарҙа Д. Юлтый Мәскәүҙә Ҡыҙыл профессура институтында уҡый, бер ни тиклем ваҡыт Центриздатта мөхәррир булып эшләй. Утыҙынсы йылдарҙа “Октябрь” журналының, “Әҙәби удар” гәзитенең мөхәррир вазифаларын алып бара, Башҡортостан Милли культура институты эшендә яҡындан ҡатнаша, Башҡортостан Яҙыусылар союзын ойоштороусыларҙың һәм уның етәкселәренең береһе була. Ошо рәүешле Юлтый үҙенең яҙыусылыҡ эшен йәмәғәт эштәре менән тығыҙ бәйләп алып бара. 1921 йылда уның "Урал моңдары" тигән шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡты. 1920 йылда яҙылған "Ҡарағол" исемле пьесаһы тамашасыларҙың яратып ҡараған сәхнә әҫәренә әүерелде. Бынан тыш Дауыт Юлтыйҙың “Салауат”, “Маҡтымһылыу”, “Тирмәндә”, “Һин кем?”, “Аралбаевтар” тигән пьесалары ла Башҡорт дәүләт драма театры сәхнәһендә ҡуйылалар. Ул бер шаршаулы пьесалар ҙа яҙа. Д. Юлтый, бик күп шиғырҙар, поэмалар ижад итеү менән бергә, хикәйәләр, очерктар ҙа яҙҙы. Дауыт Юлтый балалар өсөн бик күп шиғырҙар, поэмалар, хикәйәләр ижад итә. Уның "Сана шыуғанда" тигән шиғырҙар китабы, "Бәләкәй Ютош" исемле**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы

**хикәйәһе, "Әпәш" тигән поэмаһы балаларҙың яратып уҡыған әҫәрҙәренә әүерелде.**

**Д. Юлтый 1938 йылда шәхес культы осоро репрессияһына эләгеп һәләк булды.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Рәми Ғарипов(1932-1977)**

**Рәми Йәгәфәр улы Гарипов 1932 йылдың 12 февралендә Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа. Һуғыш бөтөүҙең икенсе йылында тыуған ауылында етенсе класты тамамлағас, ул Өфөгә килеп 9-сы башҡорт мәктәбенә уҡырға инә, шул мәктәп янындағы интернатта тәрбиәләнә. Урта мәктәпте тамамлап сыҡҡас, Башҡортостан Яҙыусылар союзы тәҡдиме буйынса, 1950 йылда Мәскәүгә барып, А. М Горький исемендәге әҙәбиәт институтына уҡырға керә. Мәскәүҙә юғары белем алып ҡайтҡас, Рәми Ғарипов 1955 йылдан “Совет Башҡортостаны” гәзитендә эшләй башлай. Бер ни тиклем ваҡыт ул Башҡортостан китап нәшриәтендә һәм “Ағиҙел” журналы редакцияһында эшләп ала.**

**1959 йылда ул тыуған яҡтарына эшкә ҡайта. “Йүрүҙән” колхозында һәм “Һарғамыш” совхозында ул өс йыл комскомитет секретары һәм Салауат район гәзитендә хаттар бүлеге мөдире булып эшләй. Аҙаҡ ул яңынан “Совет Башҡортостаны” гәзитенең әҙәби сотрудниғы була. Байтаҡ йылдар “Башҡортостан ҡыҙы” журналының яуаплы секретары вазифаһын башҡара. Рәми Ғариповтың шиғырҙар яҙыуы Арҡауыл мәктәбендә уҡығанда уҡ башлана, ә Өфөлә 9-сы мәктәптә уҡығанда әҙәби түңәрәктә актив ҡатнашыу, кисәләрҙә яҙыусылар менән осрашыу, консультациялар алыу уның ижадын йәнләндереп ебәрә. Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡыу уға ижад эшенә яуаплы ҡарарға һәм сәнғәт нигеҙҙәрен тәрән белергәөйрәтә.**

**Рәми Ғариповтың матбуғатта сыҡҡан беренсе әҫәре— 1950 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында баҫылған “Ленин” тигән шиғыры. Әҙәбиәт институтында диплом эше булған тәүге китабы — “Йүрүҙән” исемле шиғырҙар йыйынтығы 1954 йылда донъяға сыға һәм матбуғатта ыңғай баһа алды. Шулай ҙа уның шағир булараҡ формалаша барыуын 1958 йылда сыҡҡан “Таш сәскә” исемле шиғырҙар йыйынтығы асыҡ күрһәтә. Уның поэзияһы өсөн тәрән моң, фекер тығыҙлығы хас. Лирик шиғырҙарынан йәшлек ялҡыны бөркөлөп торһа ла, ул, нисектер, талғын бер сабырлыҡ менән аға. Тормоштағыса моңло һағышҡа мул ул поэзия. Институт аудиторияларынан, нәшриәт, редакция бүлмәләренән һуң, колхоз ҡырҙарында эшләү ҙә Рәми Ғарипов поэзияһына күп нәмә бирҙе, шағир өсөн үҙе бер ҙур тормош мәктәбе булып әүерелде. Рәми Ғариповтың ҡобайыр формаһына мөрәжәғәт итеүе лә һис осраҡлы түгел. Ул башҡорт халыҡ поэзияһының фекер тәрәнлеге, мәғәнә теүәллеге, форма камиллығы кеүек иң яҡшы сифаттарынан ижади өйрәнә һәм үҙ шиғырҙарында шуларҙы яңыса — новаторҙарса үҫтереү хәстәрлеген күрә. Рәми Ғарипов — үҙ ижадына ла, ҡәләмдәштәре ижадына ла ғәжәп талапсан кеше ине. Ошо талапсанлыҡ һәм ижадҡа хәстәрле, ентекле ҡараш уның әҙәбиәт хаҡында һәм йәш шағирҙар тураһында яҙған мәҡәләләрендә ярылып ята. Рәми Ғариповтың ижади уңыштары художестволы тәржемәлә лә**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы

**айырым асыҡ. Ул Пушкиндән, Лермомтовтан, Гейненан, Рудакиҙан, Ғүмәр Хәйямдан, Хетагуровтан, Абайҙан, Блоктан, Есениндан, Рәсүл Ғамзатовтан һ. б. һүҙ оҫталарынан поэзия өлгөләрен башҡорт теленә тәржемә итте. Бынан тыш Иван Франконың, А. Твардовскийҙың әҫәрҙәре, Рәсүл Ғамзатовтың байтаҡ шиғырҙары унының тәржемәһендә башҡортса сыҡты. “Ғөмүмән, әҙәби тәржемә эшен мин үҙебеҙҙең милли культура үҫеше өсөн иң кәрәкле эштәрҙең береһе тип һанайым һәм был эште ахырғаса дауам итәсәкмен”,— тип яҙҙы был хаҡта Рәми Ғарипов үҙе.**

**Рәми Ғарипов 1977 йылда Өфөлә вафат булды. 1988 йылда уға Салауат Юлаев исемендәге премия (үлгәндән һуң) бирелде.**

**Әҙип Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән оло исемгә лайыҡ булды.**



**Рауил Бикбаев(1938)**

**Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров (хәҙер Переволоцкий) районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуа.**

**Башҡорт әҙәбиәтенә һәм мәғрифәтенә Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Сәғит Агиш, ауылдашы Ғабдулла Амантай, нәҫелдәштәре Сәғит Мерәсев, Кәрим Иҙелғужин һымаҡ арҙаҡлы шәхестәрҙе биргән Туҡсоран ерендә Рауил бәләкәстән йыр-моңға, әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫә. Ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Ҡаҙағстан менән Ырымбур сигендәге Аҡбулаҡ педагогия училищеһында, Башҡорт дәүләт университетында, аспирантурала уҡый. 1965 йылдан Өфө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй. Кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертацияларын яҡлай. 1995 йылдан — Башкортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы секретаре.**

**Рауил Бикбаевтың тәүге шиғырҙары 1957 йылдан республика гәзиттәрендә, “Йәш көстәр” альманахында баҫыла башлай. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” поэмаһы донъя күрә.**

**1964 йылда Рауил Бикбаевтың “Дала офоҡтары” исемле тәүге шиғри йыйынтығы сыға. Унан һуң донъя күргән “Ҡош юлы”, “Автобиография”, “Ғүмер уртаһы”, “Ерем балҡышы”, “Яҙмышым”, “Ай күргәндәй, ҡояш алғандай” һ. б. китаптары башҡорт шиғриәтенең үҫешенә тос өлөш индерҙе**

**Бигерәк тә замандың иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған “Халҡыма хат”, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ”, “Баҙар балтаһы”, “Башһыҙ һыбайлы”, “Барокамера” тигән поэмалары киң билдәлелек алды.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы

**Алтмышынсы йылдар башынан уҡ Рауил Бикбаев шиғри ижадты төплө, фәнни тикшеренеүҙәр менән бергә алып бара. Ул Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов әҫәрҙәрен ентекле өйрәнеүгә һәм халыҡҡа еткереүгә күп көс һалды, Мостай Кәрим, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың ижади портреттарын яҙҙы, башҡорт әҙәбиәтенең алты томлыҡ тарихын баҫтырып сығарыуға күп көс һалды.**
**Рауил Бикбаевтың Өфөлә, Мәскәүҙә, Ҡазанда башҡорт, рус, татар телдәрендә егерменән ашыу китабы баҫылды.**

**Шиғриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевҡа 1993 йылда Башкортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелде. Ул — Башкортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башкортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты.**

**1966 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



***ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ (1895-1919)***

**Шәйехзада Бабич 1895 йылдың 2 ғинуарында Өфө губгернаһының Бөрө өйәҙендә (хәҙерге Дүртөйлө районында) Әсән ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Унын атаһы Мөхәммәтзакир шаҡтай хөр фекерле кеше булған. Батшаға тел тейҙергән өсөн ул хатта эҙәрләнеүҙәргә дусар ителгән.**

**Шәйехзада башланғыс белемде тыуған ауылында, атаһы уҡытҡан мәҙрәсәлә ала. Ул бәләкәстән уҡырға бик зирәк була. Туҡай, Аҡмулла, Мәжит Ғафури унын иң яратҡан шағирҙарына әйләнә. Халыҡтың йырҙарын, бәйеттәрен, әкиәттәрен мауығып тыңлай, күптәрен йәһәт отоп ала. 1910 йылда, ун алты йәшенә сыҡҡанда, Бабич ҡаҙаҡ далаларына сығып китә. Ҡустанай өлкәһенең Турғай далаларында ятҡан Дүсәнбай тигән ҡаҙаҡ ауылында балалар уҡыта. Шулай итеп, бер ни тиклем аҡса йүнәткәс, 1911 йылдың көҙөнә Өфөгә ҡайтып, “Ғәлиә” мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Ике йылдан һуң, 1913 йылдың йәйендә, йәнә үҙе уҡытып йөрөгән Дүсәнбай ауылына китә, ҡаҙаҡ балаларын уҡытыуын дауам итә. Был юлы ул ҡаҙаҡ телен ныҡлап үҙләштереп өлгөрә, аҡындарҙың әйтештәрен, өләңдәрен тыңлай, ҡаҙаҡ халҡының бөйөк шағиры Абай Ҡонанбаевтың әҫәрҙәре менән таныша. Ул “Себер сәхрәһендә, ҡаҙаҡта уҙҙырған көндәрем” тигән көндәлек дәфтәрендә, “Ҡонанбайҙың өләңендә төп нәфислек вә ләззәт табып, уны татарҙың Туҡайы, ғәрәптең Имрекәйе дәрәжәһенә мендерҙем” тип һоҡланып яҙа.**

**Шәйехзада Бабичтың әҙәби ижад, сәнғәт өлкәһенә тартылыуында Өфөнөң мәҙәни тормошо, “Ғәлиә” мәҙрәсәһе ғәйәт ҙур роль уйнай. Ул мәҙрәсәлә сығарылған “Эләктергес”, “Парлаҡ” исемле ҡулъяҙма журналдарҙа үҙенең тәүге шиғырҙарын баҫтыра, “Милли көй, сәхнә вә әҙәбиәт” түңәрәгендә йыш ҡатнаша. Йор һүҙле, музыкаль тәбиғәтле, мандолинала ғәжәп шәп уйнаусы Бабич әҙәби-музыкаль кисәләрҙең төп фигураһына әйләнә.**

**Мәҙрәсәлә Ғәлимйән Ибраһимов кеүек танылған яҙыусының уҡытыуы Бабичтың әҙәби ижад эшенә ылығыуын тағы тиҙләтеп ебәрә, әҙәбиәткә, сәнғәткә, ғөмүмән ижад эшенә етди ҡарарға өйрәтә. 1916 йылда Бабич “Ғәлиә”не тамамлағас, Троицк ҡалаһына барып, уҡытыусы булып эшләй. Ҡалала сыға торған “Аҡмулла” исемле сатирик журнал эшендә яҡындан ҡатнаша: шиғырҙар, эпиграммалар яҙа. Бер йылдан һуң Бабич Өфөгә әйләнеп ҡайта һәм 1917 йылдың авгусында “Ҡармаҡ” журналы редакцияһының саҡырыуы буйынса Ырымбурға китә, шул журналдың секретары булып эшләй башлай. Был осорҙа ул Ырымбурҙа төҙөлгән милли “Башҡорт хөкүмәте” эшенә, “Тулҡын” тигән әҙәби ойошмаға ылығып китә һәм милли азатлыҡ көрәше уртаһында ҡайнай.**

**1919 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре менән бергә Бабич Ҡыҙыл Армияға килеп ҡушыла. Ләкин Граждандар һуғышы ҡыҙыу барған был осорҙа, фронт һыҙығынан йыраҡ түгел ерҙә, 1919 йылдың 28 мартында фажиғәле рәүештә һәләк була.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Мостай Кәрим(1919-2005)**

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов) 1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың Шишмә районы Келәш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ул бик ишле ғаиләлә эш һөйөүсән һәм инсафлы бала булып үҫә. Мостафа бигерәк тә әсәһе һөйләгән әкиәттәрҙе, ҡойған йомаҡтарҙы тыңларға ярата. Иҫ киткес мауыҡтырғыс әкиәттәр уның хыялын байытырға ярҙам итәләр.**

**Мостай Кәрим 1935 йылда үҙ ауылдарындағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, ике йыл Өфө педагогия рабфагында уҡый. 1937 — 1941 йылдарҙа ул — Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультеты студенты.**

**Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, Мостай Кәрим армия сафына алына һәм һуғыштың еңеү менән тамамланыуына тиклем фронттарҙа ҡатнаша. 1942 йылдың авгусында ҡаты яраланып, туғыҙ ай госпиталдә ята. Һауығып сыҡҡас, ул фронт гәзиттәрендә эшләй, Украинанан дошманды ҡыуып сығарыу, Румынияны, Болгарияны, Венгрияны азат итеү һуғыштарында ҡатнаша. Еңеү көнөн — 1945 йылдың 9 Майын — ул Вена ҡалаһында ҡаршылай, һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн, ул II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдары менән бүләкләнә.**

**Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡас, Мостай Кәрим ныҡлап әҙәби ижад эшенә тотона һәм йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнаша. Ул 1951 йылдан 1962 йылға тиклем Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булып эшләй. 1962 йылдың майында ул РСФСР яҙыусылар идараһының секретары итеп һайлана. 1963 йылда Мостай Кәримгә Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән ҙур исем бирелә.**

**Мостай Кәрим 1935 — 1936 йылдарҙа яҙа башлай. Уның тәүге шиғырҙары йәштәр гәзиттәрендә баҫыла. 1938 йылда “Отряд ҡуҙғалды” тигән тәүге шиғырҙар китабы донъяға сыға. Бынан һуң уның байтаҡ шиғыр китаптары баҫыла. Мостай Кәрим поэзия жанры менән бергә, проза һәм драматургия жанрҙарында ла актив эшләп килә. Уның “Яңғыҙ ҡайын”, “Ҡыҙ урлау”, “Ай тотолған төндө”, “Айгөл иле”, “Салауат”, “Ташлама утты, Прометей!”, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесы буйынса ҡуйылған “Яҙмыштарҙан уҙмыш бар” исемле пьесаларын тамашасылар яратып ҡарайҙар. Проза әҫәрҙәренән “Беҙҙең өйҙөң йәме”, “Өс таған”, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”, “Ярлыҡау” һ. б. повестары баҫылып сыҡты.**

**Мостай Кәримдең әҫәрҙәре башҡорт телендә генә түгел, урыҫ, татар, украин, грузин, ҡумыҡ һәм башҡа туғандаш халыҡтар телдәрендә айырым китаптар булып баҫылды, сит ил телдәренә лә тәржемә ителде.**

**М. Кәрим — Салауат Юлаев исемендәге (1967), К. С. Станиславский исемендәге РСФСР дәүләт премияһы (1967) һәм СССР дәүләт премияһы лауреаты (1972), Социалистик Хеҙмәт Геройы (1979).**

**1940 йылдан бирле Яҙыусылар союзы ағзаһы ине.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Әмир Әминев (1953)**

**Әмир Әминев 1953 йылда Ғафури районының Һабай ауылында тыуған. Ауылында башланғыс, унан Юлыҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәбен тамамлағас 1-се һанлы интернат-мәктәптә (хәҙер Р. Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназияһы) белем ала. Әрме хеҙмәтенән һуң Халыҡтар дуҫлығы орденлы М. Горький исемендәге Мәскәү Әҙәбиәт институтында (1975 — 80) уҡый. Институттан һуң Өфөгә ҡайта һәм ун һигеҙ йыл “Ағиҙел” журналы редакцияһында эшләй. 1998 — 2002 й ул — “Шоңҡар” журналының баш мөхәррире. Бөгөн Ә. Әминев — “Шоңҡар” журналының баш мөхәррире.**

**Әҙиптең “Турат” исемле тәүге хикәйәһе 1975 йылда “Ағиҙел” журналында донъя күрә, ә “Ҡайын япрағы” тип аталған беренсе йыйынтығы 1981 йылда нәшер ителә. 1989 йылда Башҡортостан “Китап” нәшриәте уның икенсе китабын (“Йәшлек моңдары”) баҫты. “Сөңгөл” — яҙыусының өсөнсө йыйынтығы. 2003 й. яҙыусының “Ҡапҡа” исемле повестар һәм хикәйәләр йыйынтығы сыҡты.**

**Әҫәрҙәренә материалдарҙы әҙип, нигеҙҙә, ауыл тормошонан ала. Йәштәрҙең эскерһеҙ мөхәббәте, шәхестең кешеләр, йәмғиәт алдында яуаплылығы, намыҫ һәм намыҫһыҙлыҡ, үткәндәргә, тирә-яҡ мөхиткә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш — Ә. Әминев ижадының төп темалары. Ижадына шулай уҡ сюжет, композиция, форма өлкәһендә эҙләнеүҙәр ҙә хас.**

**Яҙыусы тәржемә өлкәһендә лә уңышлы эшләй. Әйтәйек, Мәскәүҙә йәшәгән һәм урыҫса ижад иткән Талха Ғиниәтуллиндың прозаһын башҡорт уҡыусыһына башлап еткереүсе ул булды. Шулай уҡ әҙәби процеста әүҙем ҡатнаша — ҡәләмдәштәренең яңы әҫәрҙәренә, яңы китаптарына рецензиялар яҙа, матбуғатта бөгөнгө проза, уның күренекле әһелдәре хаҡында мәҡәләләр менән сығыш яһай.**

**Ә. Әминев — Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы, уға Республикабыҙҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре исеме бирелгән.**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы



**Факиһа Туғыҙбаева (1950)**

**Факиһа Һаҙый ҡыҙы Туғыҙбаева (Нафиҡова) 1950 йылдың 1 ғинуарында Башҡортостандың Бүздәк районы Бәләкәй Ҡаңны ауылында тыуа. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. Хеҙмәт юлын «Башҡортостан пионеры» («Йәншишмә») гәзитендә башлай, 1979 йылда «Пионер» («Аманат») журналына күсә. 1990 йылдан «Аҡбуҙат» журналының баш мөхәррире.**

**Факиһа Туғыҙбаева — үҙенең лирик, фәлсәфәүи шиғырҙары, шулай уҡ поэмалары менән шиғриәт һөйөүселәрҙең мөхәббәтен күптән яулаған талантлы әҙибә.**

**Факиһа Туғыҙбаеваның «Мәк ялҡыны» тигән тәүге шиғырҙар китабы 1980 йылда донъя күрә. Унан һуң бер-бер артлы «Күҙ ҡараһы» (1984), «Йондоҙ асам» (1987), «Сәғәт моңо» (1991), «Фатихамды бирәм һиңә» (1994), «Минең ҡошом Һомай» (2000) шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтыҡтары баҫылып сыға.**

**Шағирә балалар әҙәбиәтендә лә ихлас эшләй. «Шаҡмаҡлы дәфтәр» (1981), «Яңы күлдәк» (1983), әкиәттәр һәм хикәйәләр, «Болонда уйнай сәскәләр» (1995) тигән шиғыр китаптары авторы. Факиһа Туғыҙбаеваның рус телендә «Хлеб да соль» (1989), «Камень счастья» (1998) исемле шиғырҙар йыйынтыҡтары бар.**

**1992 йылда шағирә «Сәғәт моңо» китабы өсөн Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премияға лайыҡ була, ә 1995 йылда «Фатихамды бирәм һиңә» китабы өсөн уға Башкортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә.**

**1981 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы. 2015 йылда Башҡортостандың халыҡ шағирәһе исеме бирелде**

Төҙөүсеһе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы

Төҙөүсеһе:   башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы  Яңауыл ҡалаһы

Төҙөүсеһе:   башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы  Яңауыл ҡалаһы